*Рәйсә КҮЗБӘКОВА,*
*Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәғарифы министрлығының милли мәғариф бүлеге белгесе*

# ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУ: УҢЫШТАР ҺӘМ БУРЫСТАР

Һуңғы йылдарҙа белем биреү өлкәһендә үҫтереүсе уҡытыу системаһының өҫтөнлөк алыуы, башҡорт телен башҡа милләт балаларының да актив өйрәнеүе Мәғариф министрлығы алдында балаларҙың һәм уҡыусыларҙың был йәһәттән булған ихтыяждарын тулыраҡ ҡәнәғәтләндереү бурысын ҡуйҙы. Был йүнәлештә байтаҡ эштәр эшләнде лә инде. Башланғыс кластар өсөн Эльконин-Давыдов системаһы буйынса  башҡорт теле дәреслектәренең тулы тупланмаһы сығарылды (авторы Сынбулатова Ф.Ш.), уҡыу программаһы таратылды. Авторҙар хәҙерге көндә дәреслектәргә методик ҡулланма төҙөйҙәр. Шулай уҡ үҫтереүсе уҡытыу системаһы буйынса башланғыс кластар өсөн туған тел дәреслектәре лә әҙерләнә (авторҙары — Дәүләтшина М.С., Атнағолова С.В.), икенсе синыф өсөн дәреслек һәм кластан тыш уҡыу китабы нәшриәткә тапшырылды. Өсөнсө, дүртенсе синыфтар өсөн дәреслектәр әҙерләнеү өҫтөндә.

Башҡорт телен өйрәнеүсе башҡа милләт балалары өсөн программа һәм яңы дәреслектәр әҙерләүгә Мәғариф министрлығы конкурс иғлан иткәйне. Конкурста еңеүсе тип табылған авторҙар дәреслек-тупланмалар өҫтөндә эш башланы. Тупланмала дәреслектән тыш дидактик материал, диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы, дәреслеккә методик ҡулланмалар бар. Министрҙар Кабинеты раҫлаған маҡсатлы программаға ярашлы рәүештә, был дәреслектәр 2005 йылға сығып бөтөргә тейеш. Беренсе си-



*Күзбәкова Рәйсә Абдрахман кыҙы 1957 йылда Ишембай районының Ғүмәр ауылында тыуған. 1974 йылда Рәми Ғарипов исемендәге республика башкорт гимназияһын тамамлағандан һуң Башкорт дәүләт университетының филология факультетында укый.*

*Мәләүез районында, һуңынан Өфө калаһының 20-се башкорт мәктәбендә эшләй. 1994 йылдан БМХ БК институтына эшкә күсә. 1989 йылда мәктәптәрҙең укыу планына индерелгән «Башкортостан мәҙәниәте» предметы буйынса методист була һәм был предметтың программаһын яҙа.*

*1997 йылда Өфө калаһы халык мәғарифы идаралығы эргәһендәге Ғилми-информацион методик үҙәк директорының инноватика буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 2000 йылдан БР халык мәғарифы министрлығының милли мәғариф бүлеге белгесе вазифаһын башкара.*



09-2001.p65 105 29.08.01, 12:41
Black

ныф өсөн дәреслек, эш дәреслеге, эш дәфтәре, дидактик материалдар һәм икенсе синыф өсөн дәреслек нәшриәткә тапшырылды ла инде. Ә программа 1999 йылда сыҡҡайны, быйыл өҫтәмә заказ йыйып таратылды. Шулай уҡ башҡорт мәктәптәре өсөн башҡорт теленән программалар ҙа өҫтәп сығарыласаҡ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәренең йөкмәткеһен камиллаштырыу буйынса ла эш алып барыла. В.Псәнчин программаһы һайланды.

Республикала бөтәһе 171917 бала башҡорт милләтенән. Шуларҙың 71178-е 845 мәктәптә үҙ телендә белем ала. Был 41,4% тәшкил итә. 968 мәктәптә 63392 бала башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнә (36,9%).

Башҡорт телен бөтәһе 1813 мәктәптә 134570 бала өйрәнә — (78,3%). Башҡорт телен өйрәнгән мәктәптәр һаны уҙған уҡыу йылы менән сағыштырғанда 38-гә артты.

Башҡорт телен бөтәһе 2827 уҡытыусы уҡыта. Шуларҙың 2286-һы (80,8%) юғары белемле, 461-е урта махсус белемле, махсус белемдәре булмағаны — 136, 182 уҡытыусы ситтән тороп юғары уҡыу йорттарында уҡый. 2000—2001 уҡыу йылына республика мәктәптәренә яҡынса 146 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы кәрәк буласаҡ.

Мәктәптәрҙә барлығы 1142 башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттары булдырылған.

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш регионына килгәндә бөтә күрһәткестәр буйынса ла Салауат районы алда бара. Башҡорт балалары барыһы ла үҙ телен өйрәнеүгә йәлеп ителгән. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү күркәткестәре лә был төбәктә башҡа райондарға ҡарағанда күпкә юғары — 48,9%. Салауаттарҙан Мәсетле, Ҡыйғы, Балаҡатай райондары ла әллә ни ҡалышмай. Иглин, Нуриман, Благовещен райондарында күрһәткестәр әллә ни юғары булмаһа ла үҫеш бар, ә бына Өфө һәм Дыуан райондарында быйыл проценттар бик ныҡ төшкән. Мәҫәлән, былтыр Дыуанда 71,9% башҡорт балаһы үҙ телен өйрәнһә, быйыл иһә 58,7%-ына ғына шундай мөмкинлек бирелгән. Өфө районында был күрһәткес 61,8%-тан 39%-ҡа тиклем төшкән.

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү төньяҡ-көнсығыш регионда, дөйөм республика менән сағыштырғанда, һәйбәтерәк ойошторолған. Ләкин ҡайһы бер райондар был йәһәттән артта килә: Дыуанда — 1,9%, Ҡыйғыла — 11,5%, Иглинда — 13,6%, ә республикала был күрһәткес 20,3% тәшкил итә. Уйланырға, һығымталар яһарға урын бар.

Уҡытыу процесының уңышлы-уңышһыҙ булыуы туранан-тура кадрҙарға бәйләнгән. Был регионда башҡорт теле һәм әҙәбиәтен бөтәһе 234 уҡытыусы уҡыта, шуларҙың 79%-ы махсус юғары белемле, ә, Өфө, Благовещен районДарын да ошо төбәк иҫәбенә индерһәк, был күрһәткес 78%-ҡа уҡ төшөп китә. Республика буйынса махсус юғары белеме булған уҡытыусылар 80,8% тәшкил итә. Мәктәп директорҙарына, райондарҙың мәғариф бүлектәре етәкселәренә кадрҙар менән уйлап эш итергә кәрәк. Аттестация ваҡытында уҡытыусыларға белеме буйынса эш тәкдим ителһен ине. Бындай ауыр ваҡытта кешене эшһеҙ ҡалдырыу бит был, тип һанаусылар булыр, ләкин һәр кем үҙ эшен башҡарырға тейеш. Республиканың дүрт юғары уҡыу йортонда юғары белемле башҡорт теле уҡытыусылары әҙерләнә, шулай булғас, беҙ уларҙы эш менән тәьмин итеү хәстәрлеген дә күрергә бурыслыбыҙ.

Балалар үҙ телен өйрәнһен өсөн Халыҡ мәғарифы министрлығы тарафынан республикала күп саралар үткәрелә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса йыл уҡытыусыһы конкурсы йыл һайын үткә-



09-2001.p65 106 29.08.01, 12:41
Black

релә. Быйылғы бишенсе конкурс Өфө ҡалаһында үтте. Һәр йыл һайын уҡыусыларҙың республика, регион-ара олимпиадалары, иншалар конкурсы уҙғарыла. Халыҡ шағиры М.Кәримдең 80 йәшлек юбилейына арналған уҡыусы балалар иншаларынан торған «Һүнмәҫлек ҙур дәрттәр һалдың бәләкәс йөрәгемә» исемле альманах баҫылып сыҡты. Быйылғы конкурс йомғаҡтары «Үтте һуғыш, ҡалды һағыш» исемле йыйынтыҡта тупланды.

Төньяҡ-көнсығыш районлар мәктәптәре лә республика күләмендә үткәрелгән сараларҙа әүҙем ҡатнаша. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы—2001» республика конкурсында Дыуан районының Мәсәғүт гимназияһы уҡытыусыһы Флүрә Йәғмәлүн ҡыҙы Бәҙретдинова икенсе урынға сыҡты, шулай уҡ был бәйгелә Ҡыйғы районы Ибрай урта мәктәбе уҡытыусыһы Низамова Таңсулпан Йәмил ҡыҙы, Салауат районы Янғантау урта мәктәбе уҡытыусыһы Ишбулдина Әлиә Ишморат ҡыҙы ла төрлө номинацияларҙа еңеүсе булдылар.

Башҡортостан суверенитетының 10 йыллығына арналған иншалар конкурсында Дыуан районының республика лицей-интернаты уҡыусыһы Ғәзирова Гөлгенә 10-сы синыфтар араһында беренсе урынды яуланы.

Март аҙағында үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән регионара һәм республика олимпиадаһында Салауат районының Лағыр урта мәктәбе уҡыусыһы Исламғолова Роза, инша һәм викториналарҙа бик матур сығыш яһап, 4-се урынға сыҡты. Ҡыйғы районының Ибрай урта мәктәбе уҡыусыһы Шәһиева Ғәлиә менән Балаҡатай районы Белянковка урта мәктәбе уҡыусыһы Бәширова Тәнзиләнең дә күрһәткестәре насар түгел.

Башҡорт телен предмет булараҡ мәктәптә уҡытыуҙың торошон бөгөнгө көндә билдәләүсе ярайһы ҡаҙаныштар, уңыштар регионда булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп осраҡта уҡыусыларҙа телгә ҡарата һаҡсыл ҡараш, ихтирам һәм талапсанлыҡ тәрбиәләнмәй, уларҙың белем һәм грамоталы яҙыу күнекмәләре етерлек кимәлдә түгел, телмәр культураһы ла үҫешмәгән. Олимпиада иншаларында ла етешһеҙлектәр күп. Уҡыусылар күберәк Салауат Юлаев, «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк» кеүек билдәле темаларға мөрәжәғәт итәләр, теманан ситләшеүҙәр күп. Мәҫәлән, «Башҡорт әҙәбиәтендә әсә образы» темаһын һайлаған ҡайһы бер уҡыусылар теманы асаһы урынға тик үҙҙәренең әсәһе тураһында ғына яҙа. Ғөмүмән, бик күп иншаларға фекер буталсыҡлығы хас, шулай уҡ фекерҙә образлылыҡ, әҙмә-әҙлелек самалы, телдәре ярлы, стиль ҡытыршы, орфографик хаталар күп. Викторина һорауҙары яуаптарына килгәндә, башҡорт теленән балаларҙың белеме насар түгел, ә башҡорт әҙәбиәтенән әҙәби төрҙәргә, сюжетҡа, жанрҙарға билдәләмә бирә белмәйҙәр. Һ.Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романынан өҙөктө танымаған, М.Өмөтбаевтың бер әҫәрен дә атай алмаған уҡыусылар бар. Ә бит олимпиадаға иң яҡшы уҡыусылар килергә тейеш. Әлбиттә, бөтә ғәйепте мәктәпкә һәм уҡытыусыға ғына ауҙарып ҡалдырырға ярамай. Бында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын әҙерләү кимәлелнең бөгөнгө талаптарға яраш лы булмауы, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһының психология, педагогика һәм лингвистика фәндәренең һуңғы ҡаҙаныштарына таянып эшләнмәүе лә ҙур роль уйнай. Туған телдәргә ҡарата битараф булған, хатта уларға ҡаршы алып барылған рәсми сәйәсәттең эҙемтәләре лә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырыуын дауам итә.

Төрлө ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарҙа башҡорт теле



09-2001.p65 107 29.08.01, 12:41
Black

дәрестәрен йәнләндереү өҫтөндә байтаҡ эштәр эшләнде һәм эшләнә. Балаларҙа телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, дәрестә уларҙың эшмәкәрлек әүҙемлеген арттырыу, традицион булмаған дәрес формалары ҡулланып эшләү, һәләтле балаларға иғтибар артыуы һөҙөмтәһеҙ ҡалмаҫ, әлбиттә.

Дәрестәрҙә балаларҙың танып-белеү эшмәкәрлеген активлаштырыу буйынса ла эш алып барылмай түгел, ләкин, ҡағиҙә булараҡ, ул күберәк төрлө уйын алымдары ҡулланыу, башватҡыстар сисеү йәки традицион булмаған дәрестәр үткәреүгә ҡайтып ҡала. Алымдарҙың һәм методтарҙың бер төрлөлөгө йәйләп ялҡыта, кластағы эштәрҙе күңелһеҙгә әйләндерә. Ҡайһы саҡта балаларҙы ҡыҙыҡтырыу үҙмаҡсатҡа әйләнеп китә, шул арҡала әҙәби әҫәрҙәрҙең төп фекере, мөһим деталдәре иғтибарһыҙ ҡалдырыла, әҙәбиәт буйынса белем биреүҙең системалылығы, бөтөнлөгө юғала.

Уҡыусыларҙың танып белеү эшмәкәрлеген активлаштырыуҙа быға тиклем билдәле булған алымдар менән бер рәттән бөгөнгө мәктәптә киң ҡулланылған проектлы уҡытыу методын файҙаланыу отошлораҡ. Балаларҙы төркөмдәргә бүлеп, уларға билдәле бер проекттар өҫтөндә эш тәҡдим ителә, бындай эште коллектив реферат тип тә атарға була. Был проекттар видеофильм, репортаж, киң йөкмәткеле интервью, реферат рәүешендә лә булырға мөмкин. Темалар тыуған яҡты, тыуған яҡтың арҙаҡлы кешеләрен өйрәнеүгә арналған. Ниндәйҙер яҙыусы ижадын башлар алдынан бер төркөм уҡыусы тарафынан алдан әҙерләнеп, яҙыусылар ижадына ҡыҫҡаса экскурсиялар ойоштороуҙы ла проект эше итеп ҡарарға мөмкин. Был уҡытыусының яҙыусының ижады тураһындағы 10-15 минутлыҡ монологынан күпкә отошлораҡтыр, тик балаларға дөрөҫ йүнәлеш кенә бирергә кәрәк. Проектлы уҡытыу һәләтле балалар менән эште ойоштороу өсөн дә яйлы. Бындай эш төрө уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу, яуаплылыҡ, үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләй, дәрестә үҙен күрһәтә алмаған балаға һәләтен асыу өсөн өҫтәлмә мөмкинлек бирә.

Һуңғы ваҡытта беҙҙең уҡытыусылар тағы ла бер бик мөһим нәмәгә иғтибар итмәй башланылар. Ул — тасуири уҡыу. Йыш ҡына уҡыусылары ғына түгел, ҡайһы бер уҡытыусылар үҙҙәре лә тасуири уҡый белмәй. Ә уҡыусыларҙың күбеһе эмоциональ яҡтан ныҡ тәьҫир иткән әҫәрҙе һәйбәт үҙләштерә, бигерәк тә 5-9 синыф уҡыусылары. Шуның өсөн әҙәбиәт дәрестәрендә уҡытыусының әҫәрҙе бала күңелен тулҡынландырырлыҡ итеп тасуири уҡыуы мотлаҡ. Ҡайһы саҡта тасуири уҡылған әҫәр, бигерәк тә шиғыр, бала күңеленә шул тиклем тәьҫир итә, уҡығандан һуң беҙ күнеккән анализдың кәрәге лә ҡалмай. Ғәҙәттә, матур итеп тасуири уҡый белгән уҡытыусының уҡыусылары ла матур итеп һөйләргә, әҫәрҙе еренә еткереп уҡырға еңел өйрәнә. Әҙәби әҫәргә анализ ойоштороуға ла уҡытыусы ентекле әҙерләнергә тейеш: дөрөҫ бирелгән һорау — дөрөҫ яуаптың яртыһы, тиҙәр. Йыш ҡына дөрөҫ ойошторолмаған анализ бына тигән әҫәрҙе лә ялҡытҡысҡа әүерелдерә, күңелгә саҡ ҡына ла заыҡ бирмәй.

Балаға үҙ-үҙен раҫлауҙа ярҙам итеүҙә, дәрескә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуҙа проблемалы уҡытыуҙың роле ҙур. Уҡытыусы проблема ҡуя, ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, балаға һәләтенә ҡарап проблема һайларға, яуап эҙләргә мөмкинлек бирә. Бындай дәрестәрҙә уҡыусы проблеманы һайларға, уны сисеү өсөн план төҙөргә, факттарҙы йыйырға, анализларға, һығымталар сығарырға өйрәнә.



09-2001.p65 108 29.08.01, 12:41
Black